Флүзә МЫРҘАБАЕВА

## Ер-һыуҙарым ерһегәндер инде

Ер-һыуҙарым ерһегәндер инде,
Мин ҡайтмаған ошо арала.
Һиндә генә күңелдәге төйөн —
Уй төйөрө шундуҡ тарала.
Табандарым тейгән тупрағымдан
Быуындарҙы нығытыр көс алам.
Тыуған йортта йоҡоларым тыныс —
Мендәрҙәргә иҙрәп баш һалам.
Әлдә тимен изге бишек имен,
Һуҡмаҡтарға үлән үҫмәгән.
Атайымдың бөтмөр ҡулдарының
Егәрҙәре, шөкөр, бөтмәгән.
Йылы нурға тулы өйҙөң түре,
Әй унған да минең әсәйем.
Бисмиллалап ҡуйған һөтлө сәйҙең
Тәмен белеп кенә эсәйем...
Биш баҫаһын бер аҙымлап ҡайтам
Нигеҙемдең йәме дауаға.
Ер-һыуымда рухым балҡыштары
Зиһенемдә уйҙар ярала.

## Саялыҡтар биктә

Күкһел тауҙар, күкһел сауҡалыҡтар,
Һеҙме әллә һағыш тараҡҡан.
Аҡ тынлыҡта бер уйланып үттем
Эҙҙәребеҙ ҡалған тарафтан.

Мин — мин түгел, болоҡһоу ҙа күңел,
Кем ҡыштарҙан эҙләй йәйҙәрен.
Дыуамал сәм, хәтерҙәрҙе айҡап,
Һүтмәк була ғүмер бәйләмен.

Үткәндәрҙең моңо йөрәк тулы,
Сабырлыҡтар — кипкән күгүлән.
Кисерәһен баштар кисерелгән,
Күреләһе инде күрелгән.

Тормош бөтөн. Тик йәшәүҙәр ситен,
Күңелдәр бит китек — бир түҙем.
Саялыҡтар биктә, хистәр өтә:
"Ҡайҙа яңылыштым — их, үҙем..."

Аҡ тынлыҡта бер моңланып үттем
Эҙҙәребеҙ ҡалған тарафтан.
Етенһыу ҙа сәсең, зәңгәр күҙең
Йылдарыма инеп аҙашҡан.

Әлфиә ӘСӘҘУЛЛИНА

## Башҡортостан

Башҡортостан — бәгер итем,
Тупрағыңа ереккәнмен.
Күргән ерҙәр көмөш кенә,
Ә һин алтын ер икәнһең,
Ошо ергә береккәнмен.

Урау юлдар урай-урай
Йөрөлһә лә сит яҡтарҙа,
Һағыштарға мана-мана
Ҡосағыңа тартып ала.

Башҡортостан! Ошо һүҙҙән
Индәремә үҫә ҡанат.
Тәүге тапҡыр талпынғанмын
Ошо ерҙә таңға ҡарап.

Тәүге йырым Башҡортостан
Гүзәллеген данлап тыуған.
Һөйөүемдең иң тәүгеһе —
Тыуған ергә — уға булған.

Илем тутәл. Башҡортостан
Шул тутәлдә гүзәл бер гөл.
Һуҡмай ҡырау, һындырмай ел —
Ул сәскәлә һәр бер миҙгел.
Башҡортостан гүзәл бер гөл.

## Еремә

Йөрәгемдә зыңғыр бер ҡыл булып,
Тыуған яҡҡа юлым тартылған.
Тулҡынланып ауыл ҡырындағы
Тау-түмәләс һыртлап артылам.

Анау сәскә миңә ҡулын һона,
Бынау ҡайын килә йүгереп.
Үҙем кеүек нисек һағынғандар,
Бөткәндәрме, тиһәм, төңөлөп.

Ҡалдырҙың да беҙҙе киттең, тиеп,
Үпкәләргә, эйе, һеҙ хаҡлы.
Тик һис ҡасан мин бит онотманым,
Тыуған ерем, һинең ҡосаҡты.

Тандарымда баҡтың ҡояш булып,
Иркәләнең, һөйҙөң елендәй.
Һиңә булған мөхәббәтле йырым
Урғылмаймы йөрәк түремдән.

Мин ҡайҙа ла һине юҡһынамын,
Гөлкәйеңдә бешкән бер орлоҡ
Йөрәгемдә үҫеп, сәскә атты,
Сит яҡтарға унда урын юҡ.



05-2001.p65 122 30.07.01, 10:45